# Рус мәктәбенең 9-сы класс уҡыусылары өсөн башҡорт теленән диктант текстары

## ЯУГИР МЕНӘН АТ.

Һуғышта ҡатнашҡан һыбайлы һәм яугир яҡшы белә: атының ҡаты яраланып, ҡан һауған эсен тырҡылдатып, йән бирә алмай ятыуын күреүҙән дә ауыр йөрәк ғазабы юҡтыр. Тик хәҙерге киноларҙа ғына кавалерист, әгәр аты яраланып ауһа, һә тигәнсе пистолетын сығара ла уға мөлдөрәп теклгән, күҙҙәренән соборла- тып йәш ағыҙып ятҡан атының маңлайына терәп ата ла китә. Дөрөҫ түгел был, дөрөҫ түгел! Быға ышанмағыҙ! һуғышҡа үҙең менән тире һеңешкән башын һәр саҡ яурыныңа һалып, бер ҡарағанда йәшкелт, ә икенсе ҡарағанда муйыл кеүек сөм ҡара күҙҙәре менән һиңә йәнтәслим бирелгәнлеген тик әйтә генә алмай теклп торған, мең ғаләм араһында һине бер кем менән дә бутамай, үҙәге өҙөлөп көткән атыңды үҙ ҡулың менән атып китеү — үҙеңдең йән дуҫыңды атып үлтереү менән бер ул. (Р. Өмөтбаев.) (117 һүҙ)

## КҮҢЕЛЛЕ ИНЕ УЛ САҠТАР.

Әсәһе сәләмәт саҡта, ҡайһылай күңелле ине! Улар ял көндәрендә Дим буйына сыға торғайнылар. Иртәнсәк тымыҡ урамдар буйлап, селәүсен тултырылған ҡалай банка тотҡан һәм, мылтыҡлы һалдат һымаҡ ҡармаҡ һаптарын иңбашына һалған Сәлих иң алдан бара; уның артынан биҙрә күтәргән әсәһе килә: иң арттан, йоҡоһо асылып етмәгән Рәшиҙәне елкәһенә атландырып, атаһы атлай. Өфө ултырған тауҙан һоҡланғыс күренеш асыла: тау аҫтында Ағиҙел тын ғына ағып ята; уға һалынған тимер күпер аша, төтөнөн аҡ шарфтай елберләтеп, поезд сығып бара; күперҙән бер ни тиклем үрҙәрәк Ағиҙелгә тымыҡ Дим килеп ҡушыла; ә йылға арьяғында күҙ иңләмәҫ яландар һәм урмандар. Тиҙерәк шул урмандарға! Һәм Сәлих тау аҫтына йүгереп төшөп китә. Дим буйында улар балыҡ тоталар, тәмле балыҡ һурпаһы бешерәләр, һыу керәләр, ҡомға ятып, ҡояшта ҡыҙыналар, туйғансы

йоҡлайҙар һәм кисен генә күҙ бәйләнер алдынан ғына, өйгә ҡайталар ине. Ә хәҙер Сәлих бер ҡайҙа ла сыға алмай: ауырыу әсәһен, өс йәшлек һеңлеһе Рәшиҙәне ҡарар кеше юҡ. (Х. Мохтар.) (149 һүҙ)

**РУХИ ХАЗИНА.**

Донъяла һәр бер халыҡтың рухи хазинаһы, халыҡты халыҡ иткән бер булмышы бар. Ул — тел. Тел — халыҡтың иң ғәзиз бүләге, йәшәү, аралашыу рәүеше. Теле барҙың иле бар, иле барҙың даны бар, тигән сәсәндәр. Тел — ул халыҡтың мәңге тере тарихы ла. Шул ғәзиз тел уны борон бер бөтөн халыҡ итеп ойоштороштҡан, уртаҡ тел, һүҙ таптырған, көнөн, йүнен йүнләшкән, тәжрибәһен, аҡылын, күңелдәгеһен үҙенә туплап, уның күркен күтәрешкән, кемлеген бар донъяға таныҡтан, халыҡтар менән аралаштырған. Ата-бабаларыбыҙҙан үлемһеҙ бүләк, иң изге аманат булған үҙ туған телебеҙҙә, мәҫәлән, халҡыбыҙҙың аҡылын һәм зирәклеген дә, күңел күркен һәм ғөрөф-ғәҙәттәрен дә, тарихын һәм бөгөнгөһөн дә, бар ғәмәлен һәм уй-хыялдарын да күңел күҙе менән күрергә һәм тойорға мөмкин. Тел ул барыһын һөйләп, көйләп тора. Уны ҡолаҡ һалып тыңлай ғына бел. (Ғ. Хөсәйенов.) (123 һүҙ)

**ӘСӘМ ТЕЛЕ — СӘСӘН ТЕЛЕ.**

Донъяла һәр кемгә ҡәҙерлеһе — үҙ туған теле. Үҙ туған теле барҙың үҙ туған рухы бар. Әсә телендә кеше донъяны, донъя матурлығын белә башлай. Уның шул телдә фекерләү культураһы, зауығы формалаша. Уй күрке тел икән, тел күрке — һүҙ. Һүҙе яғымлының үҙе лә яғымлы, теле матурҙың күңеле лә матур. Минең туған башҡорт телем — әсә һөтө менән ҡаныма һеңгән әсә телем — донъяны таныҡтан, кешеләр менән аралаштырған, белем, ғилем биргән ғәзиз телем. Шул телем мине киң донъяға алып 148 сыҡҡан, бүтән телдәрҙе белергә, рус телен икенсе туған телдәй итергә юл асҡан. Бөгөн рус теле мине бөтә кешелек ғилеменә, мәҙәниәт донъяһына

алып инде, бүтән халыҡтар менән уртаҡ телдә аралашырға мөмкинлек бирҙе. (Ғ. Хөсәйенов.) (105 һүҙ)